# Һыуҙар һипмә, әй һылыу!

Рәмил Сурағолов һүҙҙәре

Умеренно




Ысынлапмы, әллә уйнап,
Һыуҙар һиптең, сибәрем.
Һинең уттай ҡарашыңдан
Дөрләп китте йөрәгем.

Яратам, тип өндәш миңә,
Һыуҙар һипмә, әй һеңлем.
Һөйөү көтөп, наҙҙар көтөп,
Һыуһаған минең күңел.

Һөйөү уттарында яныһ,
Егет башы ни күрмәҫ.
Ҡояш һүнһә, һүнер бер көн,
Мөхәббәт һис һүрелмәҫ.

Сәскәле биҙ(е)рәң менән
Төштәремә инерһең.
Мәңгелеккә ҡауышҡансы,
Хыялымда йөрөрһөң.